## 35 – се практик эш

**Темаһы:** Боронғо Өфө тарихынан. Из истории древней Уфы.

**Башҡарылаcаҡ эш төрҙәре:** ҡылымдарҙы ҡулланыу, уларҙың хәл ҡылым формаһын барлыҡҡа килтереү, һөйләм һәм текст тәржемә итеү буйынса практик биремдәр башҡарыу.

**Наименование работы:** выполнение практических заданий на образование деепричастия, применение инфинитива, перевод текстов и предложений по теме.

**Маҡсат:** хәл ҡылымды ҡулланыу, текст тәржемә итеү буйынса күнекмәләр булдырыу.

**Цель:** формирование умений и навыков по образованию и применению деепричастий, чтение и перевод предложений и текстов по теме.

**Ваҡыт нормаһы:** 2 сәғәт.

**Әҙәбиәт:** 1.Усманова М.Ғ., Солтанғолова З.З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған һөнәри белем биргән ойошмалар өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2015.

### Техник хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре:

1.Эште инструкцион – технологик карта буйынса башҡарырға.
2.Эш урынын тәртиптә тоторға.
3.Кеçә телефондарын һүндерергә.

### Инеш инструктаж (письменно)

**1.Һүҙлек эше:** баш ҡала – столица сығышы менән Өфөнән – родом из Уфы
соҡор – ров, траншея үҙәк – центр түбәнге– нижний текә - крутой
төҙөлөш – строительный быуат – век Көньяҡ Урал – Южный Урал
биҙәнеү әйберҙәре – украшения ҡаласыҡ – городок ҡәбилә - племя
ҡала ситендә, осонда – на окраине города боронғо – древний
биләмә – территория әһәмиәтле – важный нигеҙ – основание, фундамент

**2. Хәл ҡылым – деепричастие – объединяет в себе признаки глагола (ҡылым) и наречия (рәүеш)**

| № | Хәл ҡылым (деепричастие) | Яһалышы (образование) | Миçалдар (примеры) |
|---|---|---|---|
| 1 | 1-се ысул (первый способ) | **-п, -ып,- еп, -оп, -өп** | **кил** – кил**еп** – придя, ал – ал**ып** - взяв |
| 2 | 2-се ысул (второй способ) | **-а, -ә, -й** | уйла**й** – уйла**й** – много думая |
| 3 | 3-сө ысул (третий способ) | **-ғас,- гәс, -ҡас, -кәс** | ҡайт**ҡас** - возвращаясь |
| 4 | 4-се ысул (четвертый способ) | **-ғансы, - гәнсе, -ҡансы, - кәнсе** | ҡайт**ҡансы** – пока не вернусь |

### Эш башҡарыуҙың йөкмәткеһе һәм эҙмә – эҙлелеге (Содержание и последовательность выполнения работы):

**1-се бирем**. 1. Тексты уҡығыҙ, тәржемә итегеҙ (Прочитайте текст, переведите) 2.Текстан хәл ҡылымдарҙы табығыҙ (Найдите в тексте деепричастия):

Боронғо Өфө тарихынан

Боронғо Өфө хәҙерге Пушкин урамының түбәнге осонда булған. Ҡаланың тирә – яғында текә тау торған, ә ялан яҡтан ул ер стена һәм тәрән соҡор менән уратып алынған булған. Был соҡор һәм стена әлеге көнгә тиклем матур һаҡланған. Ҡаласыҡ биләмәһендә төрлө төҙөлөш, биҙәнеү әйберҙәре табылған. Ындай әйберҙәрҙең байлығы һәм ҙурлығы менән Өфө ҡаласығы Көньяҡ Уралда әһәмиәтле урын тота. Бында халыҡтар бик күп быуаттар буйына йәшәгән, тип әйтеп була. Был әйберҙәр Өфө ҡаласығының нигеҙен яңы эраға тиклем 4 -2 –се быуаттарҙа йәшәгән ҡәбиләләр һалған, тигән уйға килтерә.

**2 –се бирем. Вариантлап эшләү:** бирелгән ҡылымдарҙан хәл ҡылым барлыҡҡа килтерегеҙ **(Работа по вариантам:** от данных глаголов образуйте деепричастия **по образцу)**:

| ҡылым | 1- се ысул | 2 – се ысул | 3- сө ысул | 4 – се ысул |
|---|---|---|---|---|
| кил | килеп -придя | килә - килә | килгәс | килгәнсе |

**1 – се вариант:** эшлә, уйла **2 – се вариант:** тыңла, йәшә

**3 - сө бирем. Вариантлап эшләү.** Бирелгән ҡылымдарҙы исемдәр менән бәйләгеҙ (сочетайте данные глаголы с существительными **по образцу**):

ят – бала ят**а,** йүгер **-** кеше йүгер**ә**

**1 – се вариант:** яҙ, уҡы, эшлә, кил **2 – се вариант:** ят, кит, йәшә, аша

**4-се бирем.** Мәҡәлдәрҙе күсереп яҙығыҙ, рус эквиваленттарын табығыҙ, хәл ҡылымдың аҫтына һыҙығыҙ (Спишите пословицы, найдите русские эквиваленты, подчеркните деепричастия):

1. *Ятып ҡалғансы, атып ҡал.* 2. Уйламай һөйләгән, ауырымай үлгән.

3. Ялҡау уйлағансы, уңған эшен бөтөргән. 4. Һауалағы торнаға ышанып, ҡулыңдағы турғайҙы ысҡындырма.

**Биремдәрҙе башҡарғандан һуң студент**

**белергә тейеш:** хәл ҡылым формаларын, дәрестә ҡулланылған лексиканы, **барлыҡҡа килтерә һәм ҡуллана белергә тейеш:** хәл ҡылым формаларын, һөйләмдәрҙе, текстарҙы.

**Контроль һорауҙар һәм биремдәр:**

1. Һорауҙарға яуап бирегеҙ (Ответьте на вопросы – можете ответить на русском языке): Что вам известно о древней Уфе? Что это за городок? Можно ли по находкам предположить, что там жили древние потомки башкир?

**Өйҙә эшләү өсөн биремдәр:** Л1. 142-144 – се биттәр, викторина һорауҙарына яуап бирегеҙ (ответьте на вопросы викторины).

Уҡытыусы _______ Мөхөтдинова .Ф.Р.